Валентин Красногоров

# Аяуһыҙ дәрес

## Жестокий урок

Пьеса в двух действиях

**ВНИМАНИЕ!** Все авторские права на пьесу защищены законами России, международным законодательством, и принадлежат автору. Запрещается ее издание и переиздание, размножение, публичное исполнение, помещение спектаклей по ней в интернет, экранизация, перевод на иностранные языки, внесение изменений в текст пьесы при постановке (в том числе изменение названия) без письменного разрешения автора.

**Контакты:**
Тел. 8-812-699-3701; 8-812-550-2146
7-951-689-3-689 (моб.)
(972)-53-527-4146
e-mail: valentin.krasnogorov@gmail.com
http://krasnogorov.com/

## Действующие лица:

**Кольцов** - профессор психологии
**Алиса** - его ассистентка
**Михаил** - студент
**Кира** - студентка

# Аяуһыҙ дәрес

**Кира**. А Кольцов ҡайҙа?

**Михаил**. Моғайын, бындалыр. Лаборатория ишеге асыҡ.

**Кира**. Нисәгә килергә ҡушты?

**Михаил**. Икегә.

**Кира**. Тимәк, 15 минуттан килә.

**Михаил**. Әгәр һуңламаһа.

**Кира**. Профессор бер ҡасанда һуңламай. Был кресланы бында күргәнем юҡ.

**Михаил**. Мин дә иҫләмәйем. Теш врачының креслоһына оҡшаған.

**Кира**. Дөрөҫөрәк, электрический стулға.

**Михаил**. Йөрөүеңде туктат. Ултыр!

**Кира**. Ҡыҙыҡ, Кольцов был юлы ниндәй эксперимент уйлап тапты икән?

**Михаил**. Һин, һуңғы ваҡытта бик күп психология менән шөғөлләнәһең?

**Кира**. Әйе, мин үҙ эшемде яратам. Был насармы?

**Михаил**. Юҡ, бик шәп.

**Кира**. Һинең өсөн псилохология - уйын. Ә мин киләсәктә уның ярҙамында аҡса эшләйәскмен. Үҙ белемдәремдән башҡа бер ниндәй ҙә капиталға өмөт итә алмайым шул.

**Михаил**. Тағын һин мине ғәйепләйһең. Атайым күп аҡса эшләгәне өсөн мин ғәйепле түгел бит. Әллә был шул тиклем ҙур гонаһмы?

**Кира**. Юҡ, Михаил, бай атайың һинең иң ҡурҡыныс сифатың түгел.

**Михаил**. Әйткәндәй, минең киләсәгем асыҡланды: диплом алғандан һуң, мин тағын уҡырға барам.

**Кира**. Ҡайҙа?

**Михаил**. Бизнес курстарына!

**Кира**. Ҡотлайым!

**Михаил**. Атайым шулай теләй. Ул мине фирма башлығы итеп ҡуйырға йыйына.

**Кира**. Был күптән аңлашыла ине. Ә нисек һуң психология? Бөтөнләй ташлайһыңмы?

**Михаил**. Нимә эшләтәһең инде? Әммә был яҡшыраҡ та! Ғаиләлә ике психолог күп булып китә.

**Кира**. Икенсеһе кем?

**Михаил**. Төшөнмәйһеңме?

**Кира**. Юҡ

**Михаил**. Һин барыһын да белеп тораһың тип уйлайым, әммә беҙгә куптән аңлашырға кәрәк ине. Беҙ һинең менән бер ярым йыл дуҫлашып йөрөйбеҙ.

**Кира**. Рәмәт инде, беҙҙең аралағы мөнәсәбәтте бик яҡшы аңлаттың.

**Михаил**. Беләм, барыһы ла һуҙылып китте, һиңә осрашыуҙарыбыҙ ҡыйынлыҡ килтерә башлағандыр тип уйлайым. Бәлки беҙҙең киләсәгебеҙ булмауы һине борсойҙыр. Бына, һинең белеүеңсә, минең ҡарттар өйләнеүбеҙгә ҡаршы торҙолар. Улар уйлауынса, әле иртәрәк.

**Кира**. Бәлки улар мин һиңә пар түгел тип һынайҙарҙыр?

**Михаил**. Шулай ҙа булыуы мөмкин, ләкин был бүтән мөһим түгел. Мин уларға хат яҙҙым һәм кисә яуап алдым. Ҡыҫҡаса әйткәндә: беҙ бергә булыуыбыҙға  улар ҡаршы түгел. Һин аңлайһыңмы?

**Кира**. Әйе.

**Михаил**. Ысынында, мин ҡарттан әҙерәк ҡурҡтым, ләкин ул мине аңлар тип өмөт иттем. Ул беҙгә  фатир ғына түгел хатта өй ҙә алырға әҙер. Улар риза булыуына мин бик шатмын.

**Кира**. Әгәр ҙә улар ҡаршы торһа, һин минән баш тартыр инеңме?

**Михаил**. Хәҙер был мөһим түгел. Беҙ бергә йәшәйәскбеҙ. Үҙ өйөбөҙ, балалар буласаҡ. Мин бит бик ныҡ балаларҙы яратам.

**Кира**. Беләм.

**Михаил**. Һәм сәскәләрҙе...

**Кира**. Беләм.

**Михаил**. Һәм һине...

Ниңә беләм тип әйтмәйһең?

**Кира**. Беләм.

**Михаил**. Тимәк, һин риза?

**Кира**. Белмәйем.

**Михаил**. Нисек инде белмәйһең? Ә ысынында, һин хаҡлы, мин һине тормайым һәм оҙаҡ өндәшмәнем, йәки хәҙер барыһы ла артта ҡалды бит. Йә, һин мине әҙ булһа ла яратаңмы?

**Кира**. Белмәйем.

**Михаил**. Һин минең турала насар уйлама. Миндә ҙур пландар бар. Мин һәр ваҡыт үҙ һүҙемдә торам, киләсәгемде уйлайым. Оло шәхестең кәләше булыуынан баш тартма.

**Кира**. Тура һүҙлеһең икән.

**Михаил**. Йә, нимә әйтерһең?

**Кира**. Белмәйем.

**Михаил**. Тағын “белмәйем”, “белмәйем” дә “белмәйем”!

**Кира**. Миңә әҙ гена уйлап алырға мөмкинме?

**Михаил**. Әлбиттә!

**Кира**. Үсекмә йәме?

**Михаил**. Һин дә миңә үсекмә, оҙаҡ өндәшмәй йөрөгәнемә. Һәм гөмүмән, сабыр булырға тырыш.

**Кира**. Нисек бармын инде. Әгәр һиңә оҡшамаһам…

**Михаил**. Бына күрәһеңме тағын ҡыҙаһың.

**Кира**. Һин хаҡлы. Мин бик уҫал булып киттем. Әйҙә башҡа был турала һөйләшмәйек. Ә профессор һаман юҡ.

**Михаил**. Биш минуттан ике тула

**Кира**. Тимәк, бөтә группанан Кольцов һинең менән мине генә һайланы мы? Ҡыҙыҡ, нимәгә беҙ икән?

**Михаил**. Ҡайҙан беләйем.

**Кира**. Кира менән бергә сәгәт икегә килегеҙ тинеме?

**Михаил**. Мин иҫләмәйем. Был бит ябай лаборатория эше.

**Кира.** Кольцовтың һәр публикацияһы матбуғатта ҙур  бәхәс ҡора. Нисә тапҡыр уны батырҙылар..

**Михаил.** Минең уйлауымса, кешеләр уның өсөн тәжрибәгә тотолған ҡуяндар, әгәр фәнгә кәрәк булһа ул йәйләмәйенсә хатта тиреләрен һыҙырып алырға әҙер.

**Кира.** Буш хәбәр! Кольцов мауғып, бирелеп эшләй, һәр ваҡыт идеяларға бай.

**Михаил.** Һәм тағы ла әле ҡарт түгел, күркәм, танылған һәм өйләнмәгән.

**Кира.** Көнләшәһеңме?

**Михаил.** Юҡ.Уның әхирәте бар.

**Кира.** Ысынлап?

**Михаил.** Һин белмәнеңме?

**Кира.** Мине был ҡыҙыҡһындырмай. Матурмы?

**Михаил.** Профессор йәмһеҙ ҡатын менән мауғыр ине тип уйлайһыңмы? Ул уның менән төрлө ҡалалар буйлап йөрөй. Хатта сит илгә бергә барҙылар.

**Кира.** Ул йәшме?

**Михаил.** Ҡыҙ тип әйтеп булмай. Көнләшәһеңме?

**Кира.** Әйе, Һине. Шул ерән тауыҡҡа.

**Михаил.** Ул ерән түгел бит, ниңә улай тиһең?

**Кира.** Юҡ, ерән!

**Михаил.** Ниңә?

**Кира.** Сөнки мин ерән сәслеләрҙе яратмайым.

**Михаил.** Төплө дәлил! Ҡалай һин уҫал икән! Кил әле шуның өсөн бер үбеп алайым!

**Кольцов.** Хайерле көн!

**Кира.** Хайерле көн!

**Михаил.** Һаумыһығыҙ, Андрей Николаевич!

**Кольцов.** Алиса Львовна - минең ассестент, таныш булығыҙ.

**Алиса.** Беҙ кисә Һеҙҙең менән күрештек.

**Михаил.** Ләкин танышманыҡ. Минең исемем Михаил.

**Кольцов.** Кира, ғәфу итеғеҙ, ә һеҙ ниңә бында? Һеҙҙә һорауығыҙ бармы?

**Кира.** Миндә? Мин... Ә һеҙ мине саҡырманығыҙмы ни?

**Кольцов.** Һеҙҙе? Нимәгә?

**Кира**. Экспериментта ҡатнашыр өсөн.

**Кольцов.** Михаил, аңлатығыҙ зинһар, ни өсөн һеҙ Кираны алып килдегеҙ. Мин бит һеҙҙе Наташа Макарованы саҡырыуғыуҙҙы һораным

**Михаил.** Әйе, дөрөç. Тик мин һеҙгә барыбер тип уйланым. Был студентмы, әллә икенсе - айырмаһы юҡ бит. Бына мин уйланым...

**Кольцов**. Бушҡа уйланғанһығыҙ. Кира, миңә бик йәл, әммә һеҙҙең ярҙамығыҙ бөгөн кәрәк булмаç.

**Михаил**. Нимә менән һеҙгә Кира оҡшамай? Яҡшы студентка, Наташанынан бер ҙә кәм түгел.

**Кольцов**. Рәхмәт, Михаил, Кираның яҡшы яҡтарын мин үҙем дә беләм. Тик был эксперимент өсөн уның Катдидатураһы бөтөнләй бармай.

**Михаил**. Нимәгә?

**Кольцов**. Бик ҡыйын аңлатыуы.

**Кира**. Зинһар өсөн, мине ҡыумағыҙ, миңә бик ҡыҙыҡ.

**Кольцов**. Һеҙҙе бер кем дә ҡыумай, тик мин бөгөн Наташа Макарованы саҡырҙым һәм һеҙҙең менән күрешермен тип уйламаным. Һау булығыҙ. Ғәфу итеғеҙ. Алиса, барығыҙ, әҙерләнегеҙ.

**Михаил**. Алиса Львовна  ла экспериментта ҡатнашасаҡмы?

**Кольцов**. Әйе.

**Кира**. Ни өсөн башҡаларға ҡатнашырға мөмкин, ә миңә юҡ?

**Михаил**. Ысынлапта, нимәһе менән минең буласаҡ кәләшем һеҙгә ярамай?

**Кольцов**. Буласаҡ кәләшегеҙ? Кисерегеҙ, белмәнем. Күптәнме?

**Михаил**. Бөгөндән алып.

**Кольцов**. Ҡотлайым.

**Михаил**. Рәхмәт.

**Кольцов**. Башларға ваҡыт.

**Кира**. Ә мин нисек?

**Кольцов**. Икенсе тапҡыр килегеҙ. Хәҙер эшка тотонорға кәрәк. Хәйер, туҡтағыҙ. Ысынлапта, айырмаһы юҡ, теләһәгеҙ - ҡалығыҙ. Асыуланмағыҙ, Кира. Ышанығыҙ, һеҙҙе опытҡа еткермәçкә минең етди сәбәптәр бар ине. Әммә шулай килеп сыҡҡас. Тимәк, һеҙ кейәүгә сығаһығыҙ?

**Михаил**. Әйе.

**Кольцов**. Теләйһегеҙме, мин баштан һеҙгә берәй тест тәҡтим итәм? Һеҙҙең психология яҡтан тура килеү-килмәүен асыҡлар өсөн? Тиҙ генә бер берегеҙгә ҡаршы тороғоҙ! Алыçыраҡ. Ә хәҙер күҙ алдына килтерегеҙ, һеҙ бер берегеҙгә ҡаршы тар куперҙән бараһығыҙ. Күпер аçтында - тарлауыҡ, ҡоларға һәм һикерергә ярамай. Башлағыҙ! Шулай итеп, һәр берегеҙгә мөһим рәүештә икенсә ярға барып етергә кәрәк. Нисек был мәсьәләне эш итәһегеҙ?

**Михаил**. Ә һеҙ нимә кәңәш итер инегеҙ?

**Кольцов**. Үҙегеҙ уйлағыҙ. Варианттар бик күп.

**Михаил**. Мәҫәлән?

**Кольцов**. Көс, һөйөү, көрәш, хәйләкәрлек ҡуллана алаһығыҙ. Үҙ һүҙегеҙҙә торорға йәки урынығыҙҙы бирергә, һайлағыҙ!

**Михаил**. Шулай ҙа, һеҙ нимә кәңәш итер инегеҙ?

**Кольцов**. Ҡатын-ҡыҙҙы үткәрегеҙ!

**Кира**. Андрей Николаевич, ә һеҙ үҙегеҙ нисек хәл итер инегеҙ?

**Кольцов**. Әгәр ҙә мин һеҙҙең һөйгәнегеҙ булһам, мин һеҙҙе ҡулға күтәрер инем дә әйтер инем: “Кира, һөйөклөм, шатлығым, буласаҡ кәләшем, ҡайҙа һине алып барырға, һинең ярғамы әллә минең?” Шулайыраҡ.

**Кира.** Ә мин яуап ҡайтарыр инем: “Ҡайһы ярға булһа ла, һөйөклөм, икеһе лә беҙҙеке!”

**Михаил**. Шулай ҙа, ҡайһы ярға алып барыр инегеҙ?

**Кольцов**. Мөһим түгел, был инде Кира менән беҙҙең тест буласаҡ. Алиса Львовна һеҙ әҙерме?

**Алиса**. Мөмкинме һине бер һүҙгә?

**Кира.** Мин аңламайым, Михаил. Ниңә һин мине бында саҡырҙың, профессор Наташа Макарованы көткән бит.

**Михаил.** Мин ысынлапта уға барыбер тип уйланым. Нимәһенә ҡаршылашҡаның аңламаным. Ә миңә һинең менән күпкә рәхәтерәк.

**Кира.** Рәхмәт.

**Михаил.** Һәм дә һөйләшеп алырға кәрәк ине.

**Кира.** Әйткәндәй, буласаҡ кәләшем тип әйтмәһәң дә булыр ине, мин һиңә әлегә яуап бирмәнем.

**Михаил.** Кисер, яңылыш сыҡты.

**Кира.** Яңылыш түгел шул, мин һине яҡшы беләм. Әйткәндәй, күперҙәге тест нимә аңлатҡанын беләһеңме? Һин һәр ваҡыт кеше һүҙен тыңлап йәшәгәнеңде. Ниңә тағын атайыңа шылтыратып һораманың, ә?

**Михаил.** нисек һиңә Алиса Львовна? Оҡшанымы?

**Кира.** Мин уны ҡайҙалыр күргәнем бар шикелле.

**Кольцов.** Ғәфү итегеҙ,башлайыҡ. Ултырығыҙ. Бына инде күпме быуаттар кешелек бер һорау өҫтөндә уйлана : баланы уҡытыуҙа тән язалары файҙалымы? Хәҙер ҙә күп кенә кеше балаға яза кәрәк тип ышана, балаға ғына түгел, хатта өлкәндәргә лә. Ғәжәп, һаман да психологтар ҙа, уҡытыусылар ҙа бер фекергә килмәгәндәр әле. Берәүҙәр - яза уҡыуҙа кәрәк тиҙәр, икенселәре - киреһенсә, яза тик зыян килтерә тигән уйҙа.

**Михаил.** Ә Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Кольцов.** Бер нисек тә. Дөрөҫөрәк, яуапты фән яғынан дәлилләргә кәрәк тип уйлайым. Шуның өсөн дә беҙ был экспериментты үткәрәбеҙ бөгөн. Һеҙ Кира һәм Һеҙ Михаил бөгөн уҡытыусы ролен башҡараһығыҙ. Һеҙгә тиҙерәк уҡыусыға дәресте ятлатырға кәрәк, әйтәйек Шекспирҙан өҙөк, бер егерме юл. Алиса Львовна үҙен үҙе аямайынса “уҡыусы” ролен башҡарырға ризалығын бирҙе. Тура әйткәндә, байтаҡ һәм ҡаты роль. Рәхим итегеҙ, Алиса. Ә хәҙер иң мөһиме: мотлаҡ һәр бер хата өсөн һеҙ уҡыусыны үҫә барған электрический ток менән һуғаһығыҙ. Ҡабатлап әйтәм - был мотлаҡ талап.

**Михаил.** Ҡаты эксперимент.

**Кольцов.** Нимә эшләтәһең. Хәҡиҡәт табыр өсөн күңел асыу ғына етмәй.

**Михаил.** Ә ток менән һуғыу кешенең һаулығына зыян килтермәйме?

**Кольцов.** Әлбиттә токтың ҙур көсө аҫтында бик ҡаты тән ауыртыуыҙары мөмкин, юғиһә был яза тип аталмаҫ ине. Бына ҡарағыҙ: тағы баҫҡан һайын токтың көсө егерме вольтҡа үҫә бара. Күрәһегеҙме? Һикһән вольтҡа тиклем түҙерлек, артабан ҡыйыныраҡ.

**Кира.** көстөң сиге бармы?

**Кольцов.** 300 вольт.

**Михаил.** Кеше өсөн ҡурҡыныс түгелме?

**Кольцов.** 300 вольт - бик етди һан. Әммә быға тиклем барыһы ла яҡшы үтә торғайны. Алиса ЛЬвовна ваҡытында медицина тикшереүен үтеп тора. Әйткәндәй, Табиптан ҡағыҙ алып килдегеҙме?

**Алиса.** Юҡ, мин кәрәк икәнен белмәнем.

**Кольцов.** Был ҡағиҙәләрҙе боҙоу. Ярар, барыһы ла яҡшы үтер тип өмөт итәм.

**Михаил.** Боросолмағыҙ, алиса Львовна мин Һеҙгә уңайһыҙлыҡ килтермәйәскмен.

**Кольцов.** Юҡ, иптәштәр. Һеҙҙең бурысығыҙ - дәресте аҙағына еткереү, тимәк өҙөктө ятлатырға. Өҫтәүенә, бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә. Уҡыусы тиҙерәк ятлауынан һеҙҙең баһағыҙ тора. Аңлашылдымы?

**Михаил.**эйе.

**Кира.** Мөмкинме Алиса Львовнаға бер һорау бирергә?

**Алиса.** Әлбиттә, тик зинһар өсөн миңә Алиса тип кенә өндәшегеҙ.

**Кира.** Әйтегеҙ, ниңә Һеҙ был креслоға ултырырға ризалаштығыҙ?

**Алиса.** Фән ҡорбан талап итә.

**Кира.** тимәк Һеҙ фәнгә булған мөхәббәтегеҙ өсөн ҡорбан булырға риҙаһығыҙмы? әллә Андрей Петровичҡа ярҙам итергә теләйһегеҙме?

**Кольцов.** Алиса Львовна был эш өсөн ҙур аҡса ала. Дәресте башлар алдынан тағы берҙе ҡабатлап үтәм, һеҙ үҙ теләгегеҙ менән ҡатнашаһығыҙ һәм һеҙ был дәрес өсөн яуаплы. Кира һеҙ риҙамы?

**Кира.** Мин Һеҙгә ышанам.

**Кольцов.** Рәхмәт, әммә был эштә һеҙ үҙегеҙ яуаплы. Оҡшамаһа, китергә һуң түгел. әйткәндәй мин Наташаны бөгөн көттөм.

**Кира.** Мин ҡалам.

**кольцов.** Ә Һеҙ, Михаил?

**Михаил.** Ысынлап әйткәндә, мин ябай дәрестән ҡыҙығыраҡ берәй нәмә көттөм, ләкин мин ҡалам.

**Кольцов.** Бик яҡшы. Һәм тағы ла, экспиремент өсөн һеҙгә түләү тейешле. Алығыҙ һәм ҡул ҡуйығыҙ.

**Михаил.** Нимәгә ул.. кәрәк икән , мин былай ҙа ярҙам итергә әҙер…

**кольцов.** Теләйһегеҙ икән - университетҡа хәйер итеп бирерһегеҙ, ә әлегә алығыҙ. Шулай итеп, килешеүҙе төҙөнөк. Михаил, электродтарҙы яндырайыҡ. Ассистенты креслоға бәйләргә ярҙам итегеҙ.

**Михаил.** Бәйләргә? Ни өсөн

**Кольцов.** Һуңынан аңларһығыҙ. Әҙер. Йә, кем беренсе?

**Михаил.** Ҡатын-ҡыҙҙы уткәрәм.

**Кольцов.** Бик яҡшы. Кира бына һеҙгә китап, үҙегеҙ егерме юллыҡ шиғыр һайлап алығыҙ. Ә Һеҙ күрше бүлмәлә көтөгөҙ һәм бер кемде лә уткәрмәгеҙ.

**Михаил.** Ҡарарға ярамаймы ни?

**кольцов.** Юҡ.

**кира.** Алиса Львовна…

**Алиса.** Миңә Алиса тип кенә өндәшегеҙ! Мин бит Һеҙҙең укыусығыҙ.

**Кира.** Ярай. Беҙ Һеҙҙең менән быға тиклем күрешкәнеьеҙ булманымы?

**Алиса.** Бәлки. Хәтерләмәйем.

**Кольцов.** Башлағыҙ, Кира.

**Кира.**

Һеҙ күрәһегеҙ мине, синьор Бассанио,

Мин ябай ҡыҙ. Әммә һеҙҙең өсөн

Алтмыш тапҡыр ҡиммәтерәк булыр инем

Тәккәберлек өсөн түгел,

Тик Һеҙҙең алда яҡшыраҡ күренер өсөн.

Йөҙ мәрәтәбә сибәрерәк, зиһенлерәк,

яғымлыраҡ һәм байыраҡ булһа инем.

Әммә минең бар ҡиммәтем бик кес кенә:

Ябай бер ҡыҙ, белемем юҡ. Тик шуға шат:

Ҡарт түгел мин, белмәгәнде өйрәнә алам.

Барыһынан да бигерәк, шуға бәхетле мин:

Тыйнаҡ күңелем, аҡылым һиңә тапшырыла.

Бойһонам мин һиңә - күңелем батшаһына!

Үҙем дә һәм бар нәмәм дә һинеке хәҙер.

Был көнгәсә һарайыма эйә инем,

Хеҙмәтселәремә хаҡлы хужа инем.

Үҙ-үҙемә батша инем, әммә бөгөн

Һарайым да, хеҙмәтселәр ҙә, үҙем дә -

Барыбыҙ ҙа һинеке беҙ - падишахым!

теүәл егерме юл!

**Кольцов.** Бик яҡшы. дауам итегеҙ.

**Кира.** Иғтибар менән тыңлағыҙ. Һеҙ күрәһәгеҙ мине, синьор Бассанио, мин ябай ҡыҙ.

**Алиса.** Һеҙ күрәһегеҙ мине, синьор Бассанио, мин ябай ҡыҙ.

**Кира.** Һеҙ иҫ-киткес шиғыр уҡыйһығыҙ! Әммә һеҙҙең өсөн алтмыш тапҡыр ҡиммәтерәк булыр инем тәккәберлек өсөн түгел, һеҙҙең алда яҡшыраҡ күренер өсөн!

**Алиса.** Әммә һеҙҙең өсөн алтмыш тапҡыр ҡиммәтерәк булыр инем, тәккәберлек өсөн…

**Кира.** Һеҙ яңылыштығыҙ, Алиса, иғтибарлы булығыҙ! *(нажимает 20*) Ҡабатлайыҡ! Әммә һеҙҙең өсөн алтмыш тапҡыр ҡиммәтерәк булыр инем тәккәберлек өсөн түгел, һеҙҙең алда яҡшыраҡ күренер өсөн.

**Алиса.** һеҙҙең алда яҡшыраҡ күренер өсөн…

**Кира.** Һеҙҙең алда яҡшыраҡ күренер өсөн, йөҙ мәртәбә сибәрерәк, зиһенлерәк, яғымлыраҡ һәм байыраҡ булһа инем…

**Алиса.** Һеҙҙең алда яҡшыраҡ күренер өсөн, йөҙ мәртәбә матурыраҡ, зиһенлерәк..

**Кира.** “сибәрерәк” , “матурыраҡ” түгел! *(нажимает 40)* Ауыртамы?

**Алиса.** Түҙерлек.

**Кольцов.** Кира, ниңә һеҙ туктап ҡалдығыҙ? Дауам итегеҙ.

**Кира.** Алиса, зинһар өсөн, иғтибарлы булығыҙ. Был ябай һүҙҙәр. Әммә минең бар ҡиммәтем бик кес кенә. ябай бер ҡыҙ, белемем юҡ.

**Алиса.** әммә минең ҡиммәтем кес кенә бит , мин ябай ғына, минең белемем юҡ…

**Кира.** *(нажимает 60)* Андрей Николаевич, мөмкинме дәресте туктатырға?

**Кольцов.** Ниңә?

**Кира.** Миңә ул оҡшамай.

**Кольцов.** Был сәбәп түгел, Кира! Күп нәмә беҙгә оҡшамай: укыу, эш, ләкин беҙ барыбер эшләйбеҙ! Сөнки "кәрәк" тигән нәмә бар!

**Кира.** шулай ҙа миңә оҡшамай был эксперимент.

**Кольцов.** Кира, һеҙ мине яҡшы белгес тип һынайһығыҙмы?

**Кира.** Әлбиттә.

**Кольцов.** Нисек һеҙ уйлайһығыҙ, мин бушҡа опыт үткәрер инемме?

**Кира.** Юҡ.

**Кольцов.** Улайһа ышанығыҙ миңә, һәм икеләнеүҙәрегеҙҙе ташлағыҙ! *(кира берет книгу и снова закрывает)* Ниңә һеҙ туктанығыҙ?

**Кира.** Һеҙҙең ярҙамсығыҙғы ҡыйын.

**Кольцов.** Иғтибар итмәгеҙ, ул үҙ теләгеме менән килде.

**Кира.** Ябай бер ҡыҙ, белемем юҡ. Тик шуға шат: ҡарт түгел мин, белмәгәнде өйрәнә алам.

**Алиса.** Ябай ғына бер ҡыҙ. тик шуға шатмын, ҡарт түгелмен, белмәгәнемде өйрәнә алам.

*Кира нажимает кнопку. Алиса тихо вскрикивает. На экране компьютера - "80". Кира закрывает книгу.*

**Кольцов.** Тағын нимә, кира?.... Дауам итегеҙ.

**Кира.** Мин булдыра алмайым.

**Кольцов.** Беҙ хистәрҙе оноторға тейеш, беҙ бит ғалимдар.

**Кира.** Ләкин кеше яфалаусылар түгел.

**Кольцов.** Буш һәм ауыр һүҙҙәрҙең кәрәге юҡ. Павлов менән Пастерҙы ла хайуандарҙан опыттар ҡуйған өсөн аяуһыҙлыҡта ғәйепләнеләр, әммә улар кешелек өсөн хеҙмәт иттеләр.

**Кира.** Ниңә мин миңә оҡшамаған эште башҡарырға тейеш?

**Кольцов.** Кира, һеҙ миңә тәртипле тыйнаҡ ҡыҙ булып күрендегеҙ! Һеҙ минең өмөтөмдө өҙҙөгөҙ.

**Кира.** Һеҙ ҙә.

**Кольцов.** Хәтерегеҙҙәме, мин һеҙҙең ҡатнашыуығыҙға ҡаршы торҙом, хәҙер нисек һеҙҙе аңларға?

**Кира.** Һеҙгә был эксперимент шул тиклем мөһим булһа, мөмкинме мин Алиса Львовна менән алмашам?

**Кольцов.** Нисек итеп?

**Кира.** Мин креслоға ултырам, ә ул кнопкаға баҫһын.

**Кольцов.** Юҡ, бының булыуы мөмкин түгел.

**кира.** ниңә?

**Кольцов.** Һеҙҙең врачтан ҡағыҙығыҙ юҡ.

**Кира.** Алисаның да юҡ.

**Кольцов.** Бәхәсләшергә ваҡыт юҡ. Дауам итегеҙ, Кира.

**Кира.**

Тыйнаҡ күңелем, аҡылым һиңә тапшырыла.

Бойһонам мин һиңә - күңелем батшаһына!

Үҙем дә һәм бар нәмәм дә һинеке хәҙер.

*Голос ее становится все тише и, наконец, совсем умолкает.*

**Кольцов.** Нимә булды?

**Кира.** Мин булдыра алмайым.

**Кольцов.** Йәл. Тиҙҙән һеҙ диплом аласаҡһығыҙ. Мин һеҙҙе яҡшы фирмаға тәкдим итергә йыйына инем, ә хәҙер һеҙгә тәртип етмәгәнен аңланым. Һеҙ эшһеҙ ҡалырһығыҙ тип уйлайым. Һеҙ университеттан стипендия алағыҙ шикелле?

**Кира.** Эйе, бер йыл.

**Кольцов.** Ә быға тиклем аҡсаны ҡайҙан таба инегеҙ?

**Кира.** Буш ваҡытта официант булып эшләнем.

**Кольцов.** Стипендия башҡа түләнер тип уйламайым…. Һеҙ опытты дауам итәһегеҙме?... Ярай, һеҙ буш… Бында түгел, икенсе ишектән сығығыҙ.

**Михаил.** Андрей Николаевич!

**Кольцов.** Нимә булды, Михаил! Мин һеҙгә инергә ҡушманым бит!

**Михаил.** Ғәфү итегеҙ…

**Кольцов.** Сығығыҙ лабораториянан!

**Михаил.** Унда журналистар йыйылды..

**Кольцов.** Кем уларҙы саҡырҙы?

**Михаил.** Һеҙ түгелме ни?

**Кольцов.** Юҡ.

**Алиса.** Улар берәй нәмә һораныларmы?

**Михаил.** Эйе, мин уларға эксперимент тураһында һөйләнем, кәрәкмәй инеме?

**Кольцов.** Юҡ-юҡ,. Ысыныда, мин бер ҡасанда журналистарҙы саҡырмайым, барығыҙ уларҙың күңелен асығыҙ, Михаил!

**Кира. Ә** һеҙ Михаил менән опытты дауам итәһегеҙме?

**Кольцов.** Әлбиттә!

**Кира.** Һеҙгә минең менән опыт етмәнеме?

**Кольцов**.Һеҙ бик күп һорауҙар бирәһегеҙ. Һау булығыҙ, Кира!

**Кира.** Мөмкинме миңә ҡалырға?

**Кольцов.** Нимәгә?

**Кира.** Бәлки Михаилдың дәресенән һуң мин үҙ хатамды аңлармын.

**Кольцов.** Ярамай.

**Кира.** Ни өсөн?

**Кольцов.** сөнки Һеҙ Михаилға ҡыйынлыҡтар килтерә алаһығыҙ..

**Кира.** Мин шаршау артында ғына ултырырмын.

**Кольцов.** Һеҙҙең ныҡышлығығыҙ мине аптырата.

**Кира.** Миңә ҡыҙыҡ, Миша нисек дәрес үткәрер икән.

**Кольцов.** Ысынлапта, ул бит һеҙҙең буласаҡ иптәшегеҙ. Улайһа, ҡалығыҙ. Тик бер шарт бар, һеҙгә экспериментҡа ҡыҫылырға ярамай.

**Кира.** Әлбиттә.

**Кольцов.** Ултырығыҙ бында. Тик онотмағыҙ - һеҙ бында юҡ!

**Кира.** Борсолмағыҙ!

**Алиса.** Андрей, зинһар, сумкамды алып бир әле!

**Кольцов.** Насар күренәһең. Бәлки бөгөнгә етеп тора?

**Алиса.** Барыһы ла яҡшы.

**Кольцов.** Ысынмы?

**Алиса.** Ысын.

**Кольцов.** Улайһа,исмаһам тәнәфес эшләйек. ***Отпускает ремни, снимает электроды и освобождает Алису. Она встает, делает несколько шагов, но снова садится.*** Бәлки, туктап торорбоҙ?

**Алиса.** Юҡ инде, әйҙә эште бөтөрәйек. Был бит һуңғы тапҡыр?

**Кольцов.** Эйе, иң һуңғы тапҡыр.

**Алиса.** Яҡшы, тимәк миңә ял итеп алырға ғына кәрәк.

**Кольцов.** Улайһа - тәнәфес.

**Кольцов.** Ял иттеңме? Башлайыҡ!... Тағы берҙе ҡабатлап әйтәм.. әгәр ҙә..

**Кира.** Мин аңланым.

**Кольцов.** Бик яҡшы. Михаил!

**Михаил.** Ә Кира ҡайҙа?

**Кольцов**. Китте.

**Михаил.** Мине көтмәйенсә ме? Нисек ул дәресте үткәрҙе?

**Кольцов.** Бик яҡшы.

**Михаил**. Мин шикләнмәнем. Кира - была тигән укытыусы! Мин беләм, ул миңә имтихандарға әҙерләнергә ярҙам итә. Йә, нисек, Алиса, тыңлаусан укысы булдығыҙмы?

**Кольцов.** Башлағыҙ.

**МИхаил.** Мин әҙер.

**Кольцов.** Шарттар һеҙгә аңлашыла. Была Шекспирҙың китабы, өҙөктө һайлап алып ятлай башлағыҙ. Күҙ уңында тотоғоҙ: бирелгән өҙөктө укыусы тиҙ арала яттан белергә тейеш.

**МИхаил.** Һынатмаҫмын, тип өмөт итәм. Нимә һайлап алырбыҙ? Бәлки, иҫегеҙҙә мәктәптән берәй өҙөк ҡалғандыр? Шыбырлап әйтегеҙ.

**Алиса.** Йәл, иҫемдә бер нәмә лә юҡ. Гамлеттың “Булырғамы әллә булмаҫҡамы”нан башҡа бер нәмә лә хәтерләмәйем.

**Михаил.** Улайһа, ни булһа ла булыр тип асам. Әҙерһегеҙме? Тыңлағыҙ һәм ҡабатлағыҙ.

**Кольцов.** Мин ваҡытты билдәләйем.

**МИхаил.**

Тапҡан ваҡыт. Һуңлар ине аҙыраҡ,
Мин дә, бәлки, бушай төшөр инем!

**Алиса.**

Тапҡан ваҡыт. Һуңлар ине аҙыраҡ,
Мин дә, бәлки, бушай төшөр инем!

**МИхаил**. Бик шәп. Артабан киттек.
Көндө көндәр ҡыуа, беҙ тын ғына:
Нәмә булыр, тибеҙ, иртәгә:

**АЛИСА.**

Көндө көндәр ҡыуа, беҙ тын ғына:
Нимә булыр, тибеҙ, иртәгә:

*Михаил нажимает кнопку. На экране компьютера - "20". Алиса реагирует на этот слабый удар лишь тем, что исправляет ошибку.*

Ғәфү итегеҙ.
"Нәмә булыр,..."
**МИХАИЛ.** "...тибеҙ, иртәгә".
**АЛИСА**. "Нәмә булыр, тибеҙ, иртәгә"
**МИХАИЛ**. Зинһар өсөн, һуңғы ике юлды ҡабатлағыҙ әле.
**АЛИСА**.

Көндө көндәр ҡыуа, беҙ тын ғына:
Нимә булыр, тибеҙ, иртәгә:

*Удар током. 40 Вольт. Алиса морщится.*

Мин яңылыштыммы ни?
**МИХАИЛ**. Нимә булыр түгел - нәмә булыр. Мин бик тиҙ укыйыммы? Әллә бер нәмә аңлашылмаймы?
**АЛИСА**. Юҡ, һеҙ яҡшы укыйһығыҙ! Күрәһең, мин иғтибарымды туплай алмайымдыр.
**МИХАИЛ.** Бәлки, дауам итер алдынан, ошо юлдарҙы ҡабатлап үтәйек? Унан ун алты юл ғына ҡаласаҡ.
**АЛИСА**. Шулай яҡшыраҡ булыр..
**МИХАИЛ**. Һеҙ уларҙы иҫегеҙҙә ҡалдырҙығыҙмы?
**АЛИСА**. Эйе, тип улайым..

Тапҡан ваҡыт. Һуңлар аҙыраҡ,
Мин дә, бәлки, бушай төшөр инем!

өсөнсө юлы төшөп ҡалды..
**МИХАИЛ**. Иҫләргә тырышығыҙ. МИн шундай матур ҡатынды яҙаларға теләмәйем.
**КОЛЬЦОВ**. Михаил, теләйһегеҙме юҡмы, йәки укыусы яңлыша икән, һеҙ мотлаҡ уны яҙаларға тейеш. Алиса Львовна яңылышты. Тимәк, баҫығыҙ.

*Михаил, поколебавшись, нажимает кнопку. Алиса вздрагивает. На экране компьютера - "60". Кольцов продолжает.*

Һәм тағы ла, буш хәбәрҙәр менән ваҡытығыҙҙы уҙғармағыҙ. Ваҡыт һыналған..
**МИХАИЛ**. *(Он становится серьезным.)* МИн өсөнсө юлдан башлап укыйым.

Көндө көндәр ҡыуа, беҙ тын ғына:
Нәмә булыр, тибеҙ, иртәгә:

**АЛИСА.**

Көндө көндәр ҡыуа, беҙ тын ғына:
Нәмә булыр иртәгә, тибеҙ:

*Удар током. Алиса вскрикивает.*

**МИХАИЛ.** Ғәфү итегеҙ. МИңә ысынлап та , бик уңаһыҙ... Тик һеҙ яңылыштығыҙ иртәгә, тибеҙ түгел, ә тибеҙ иртәгә.
**АЛИСА**. Ғәфү үтенмәгеҙ,был һеҙҙең бурысығыҙ. Яңылышыуымда үҙем ғәйепле..
**МИХАИЛ**. Тағы ҡабатлайыҡмы?
**АЛИСА**. Дауам итһәк, яҡшыраҡ булыр.
**МИХАИЛ**.

"Иртәгә!" Шулай ғүмер аға бирә,
Яҡынайтып һуңғы сәғәтте.

**АЛИСА.**

"Иртәгә!" Шулай ғүмер аға бирә,
Яҡынайтып… Яҡынайтып....

*Удар. 100 Вольт. Алиса дергается и громко вскрикивает.*

**МИХАИЛ**. *(Он растерян.)* Андрей Николаевич, мин блмяйем, дауам итергә хаҡым бармы икән, беҙҙең алдыбыҙҙа ҡатын-ҡыҙ бит.
**КОЛЬЦОВ**. *(Резко.)* Ҡатын-ҡыҙ түгел, ә түләнгән ғилми хеҙмәткәр! Үҙегеҙҙең эшегеҙҙе уйлаһағыҙ яҡшыраҡ булыр ине. Һеҙ һәр ваҡыт тыңлаусан студент булдығыҙ. Был тапҡыр ҙа онотолмағыҙ. Уҡыусығыҙҙы тыңларға мәжбүр итегеҙ. Быны ғына булдыра алмаçһығыҙмы ни?
**МИХАИЛ**. МИн ҡабатлайым.

"Иртәгә!" Шулай ғүмер аға бирә,
Яҡынайтып һуңғы сәғәтте.

**АЛИСА**.

"Иртәгә!" Шулай ғүмер аға бирә,
Яҡынайтып...

*Умолкает, но, с трудом вспомнив нужные слова, заканчивает строку.*

Яҡынайтып һуңғы сәғәтте.
**МИХАИЛ**. Афарин, Алиса. Алты юл.. Дүрт юлдан яртыһы буласаҡ..

Һәр үткән көн, атлаған һәр аҙым
Беҙҙе гүргә генә яҡынайтҡан.

**АЛИСА.**

Һәр үткән көн, атлаған һәр аҙым
Һеҙҙе гүргә… Һеҙҙе гүргә генә яҡынайтҡан.

*Кнопка. 120 вольт. Алиса громко стонет.*

**МИХАИЛ**. *(С раздражением повторяя.)*

Һәр үткән көн, атлаған һәр аҙым
Беҙҙе - аңлайһығыҙмы, Алиса, беҙҙе гүргә генә яҡынайтҡан

Ике юллыҡ шиғырҙы ятлауы шул тиклем ҡыйынмы ни?

**АЛИСА.** Беҙҙе гүргә генә...

**МИХАИЛ**. Юҡ, тәүге юлды ҡабатлағыҙ.

**АЛИСА**.

Һәр көн… Һәр атлаған аҙым…
Һәр...

*(Жалобно.)* Мин буталдым.

*Удар током. 140 Вольт. Алиса кричит, пытаясь вырваться из пут.*

**МИХАИЛ**. Һәр үткән көн, атлаған һәр аҙым

*(Раздраженно.)* Йә, ҡабатлағыҙ.

**АЛИСА**. *(Дрожа всем телом.)* Һәр үткән көн...

МИн бер нәмә лә хәтерләмәйем, дәресте туктатығыҙ.

**МИХАИЛ**. Нимәгә?

**АЛИСА**. Мин ҡурҡам..

**МИХАИЛ.** *(Тихо, профессору.)* Бәлки ысынлап та туктап торайыҡ?

**КОЛЬЦОВ**. Ун юлды ла ятламайынсамы? Ысынында, һеҙҙән көтмәгәйнем..

**МИХАИЛ**. Уға ҡыйын бит.

**КОЛЬЦОВ**. ТИмәк һеҙ булдыра алмайһығыҙ?

**МИХАИЛ**. Миндә эш түгел. МИн түгел,ул һорай бит,

**КОЛЬЦОВ**. *(Заговорщически.)* ә һеҙ уны тыңламағыҙ.

**МИХАИЛ**. Нисек?

**КОЛЬЦОВ**. Һеҙ укыусыларҙы белмәйһегеҙме ни? Улар уйнап маташа. Һеҙ көслөмө?

**МИХАИЛ**. Көслө, ләкин..

**КОЛЬЦОВ**. Тамамлағыҙ дәресте.!Группала иң насар студент булыуығыҙҙы теләйһегеҙме?

**МИХАИЛ.** *(Возвращаясь к креслу.)* Әйткәндәй.. Кира, тулыһынса ятлата алды тинегеҙме әле?

**КОЛЬЦОВ**. Әлбиттә.

**МИХАИЛ.** ТИҙ арала?

**КОЛЬЦОВ**. Үҙегеҙҙе уйлағыҙ.

**МИХАИЛ**. *(Усаживаясь у кресла, Алисе.)* Ғәфү итегеҙ, Андрей Николаевич экспериментты туктатырға ярамай тине.

*Алиса молчит. Михаил открывает книгу.*

Ҡайҙа тукталғайныҡ әле.

**АЛИСА**. Баштан башлайыҡ.

**МИХАИЛ.** *(Взглянув на часы.)* Улайһа, беҙ өлгөрмәйәсәкбеҙ.

**АЛИСА**. һеҙ профессор менән оҙаҡ һөйләштегеҙ, мин барыһын да оноттом шикелле

**МИХАИЛ**. *(Недовольно.)* Йә,Ярай.. *(Читает.)*

Тапҡан ваҡыт...

*Алиса молчит. Михаил повторяет.*

Тапҡан ваҡыт...
Йә!
Тапҡан ваҡыт...!

**АЛИСА**. *(Овладев собой, продолжает.)*
...Һуңлар ине аҙыраҡ,
Мин дә, бәлки, бушай төшөр инем!...

*Останавливается.*

**МИХАИЛ**.
Көндө көндәр ҡыуа, беҙ тын ғына:
Нәмә булыр, тибеҙ, иртәгә:

**АЛИСА**.
Көндө көндәр ҡыуа, беҙ тын ғына:
Нәмә булыр иртәгә, тибеҙ:

*Михаил протягивает руку к кнопке.*

Баҫмағыҙ, үтенеп һорайым баҫмағыҙ! *(Пытается вспомнить.)*
Нәмә булыр...

*Останавливается.*

**МИХАИЛ.** ~~Бер генә һүҙҙе ятларға~~ Ятлауы шул тиклем ҡыйынмы ни.
**АЛИСА**. Ғәфү итегеҙ... Мин тик баҫыуығыҙ тураһында ғына уйлайым... Баҫмағыҙ!!
**МИХАИЛ**. МИн насар уқытыусы булып күренергә теләмәйем, зинһар өсөн үҙегеҙҙе ҡулығыҙға алығыҙ!
**АЛИСА**. *(Не отрывая взгляда от руки Михаила, лежащей на кнопке.)* "Нәмә булыр..." Кәрәкмәй!
**МИХАИЛ**. Алиса, үтенәм, һөйләшмәгеҙ, текстты ғына әйтегеҙ!
**АЛИСА**. Нәмә булыр… иртәгә тибеҙ...

*Михаил нажимает кнопку. 160 Вольт. Алиса, громко вскрикнув, пытается вырваться из кресла.*

**МИХАИЛ.** Нәмә булыр, **тибеҙ**, иртәгә

**АЛИСА.** *(Едва слышно, покорно.)* "Тибеҙ, иртәгә"
**МИХАИЛ.**
"Иртәгә!" Шулай ғүмер аға бирә,
Яҡынайтып һуңғы сәғәтте.

*Заметив, что Алиса не слушает.*

Һеҙ ишетәһегеҙме?
**АЛИСА**. Ғәфү итегеҙ,. ҡбатлағыҙ, зинһа өсөн!.
**МИХАИЛ.** *(Стиснув зубы.)* Һеҙ мыҫҡыл итәһегеҙме? Мин ун тапҡыр ҡабатланым.
**АЛИСА**. Әгәр мин ғәйпеле икән, язалағыҙ.

*Михаил тянет руку к кнопке.*

Кәрәкмәй! *(Собирается с силами.)*
“Иртәгә!” Шулай ғүмер... аға бирә...
Яҡынайтып… Яҡынайтып...
Үтенәм, туктағыҙ!
**МИХАИЛ.** юҡ!. Беҙ икебеҙ ҙә дәресте бөтөрәсәкбеҙ!

*Нажимает кнопку. 180 Вольт. Алиса долго кричит и бьется в кресле. Михаил упорно повторяет.*

Һәр үткән көн, атлаған һәр аҙым

**АЛИСА.** Һәр үткән көн, һәр... аҙым...
**МИХАИЛ**. МИн аңламайым, һеҙ юрамал ҡыланаһығыҙмы?

*Нажимает кнопку. 200 Вольт. Алиса трясется, как в лихорадке.*

**АЛИСА**. Ебәргеҙ мине, һеҙ бит күреп тораһығыҙ, килеп сыҡмағанын, мин йөрәгем ауырта.
**МИХАИЛ**. Кәрәкмәгн һүҙҙәрҙе һеҙ бик яҡшы әйтһегеҙ, тик мин һеҙгә ышанмайым!

*Нажимает кнопку. 220 вольт. Алиса стонет.*

Ә хәҙер тыңлағыҙ, һәм ҡабатлағыҙ!
Һәр үткән көн, атлаған һәр аҙым

**АЛИСА**. *(Тяжело дыша и не отводя испуганного взгляда с кнопки.)*
Һәр үткән көн… Һәр үткән көн...
*(Громко вскрикивает.)* А-а!
**МИХАИЛ**. *(Грубо.)* Ниңә ҡысҡыраһығыҙ, мин бит әле баҫманым!
**АЛИСА**. *(Задыхаясь.)* Һеҙ ҡулығыҙҙы тарттығыҙ!.
**МИХАИЛ.** Ярай, мин алам ҡулымды
**АЛИСА**. Һәр үткән көн, атлаған һәр аҙым
**МИХАИЛ**. Ниһайәт.
Беҙҙе гүргә генә яҡынайтҡан.
Бөттө, һүнде, майы бөттө шәмдең!
**АЛИСА**. Һеҙҙе гүргә....
**МИХАИЛ**. *(Вне себя.)* Тағын “һеҙҙе”! Беҙҙе гүргә, беҙҙе”
**АЛИСА**. *(Испуганно.)* Кәрәкмәй
**МИХАИЛ**. *(Зло.)* Юҡ, кәрәк!*Кнопка. 240 Вольт. Алиса корчится в судорогах. Кира, бледная, в слезах, с ужасом следит за уроком.*

Беҙҙе гүргә генә яҡынайтҡан...
Йә!

*Алиса жалобно стонет. Михаил нажимает кнопку. Алиса содрогается и громко, надрывно кричит.*

**КИРА**. *(Выскакивая из-за ширмы.)* Тукта! Хәҙер үк тукта тинем!

*Михаил относится к появлению Киры довольно равнодушно. Он весь поглощен своим неудавшимся уроком.*

**МИХАИЛ**. Ҡабатла!

Бөттө, һүнде, майы бөттө шәмдең...

*(В бешенстве.)* Ҡабатла, тинем!

*Нажимает кнопку. 280 Вольт. Алиса кричит, стонет, дергается.)*

**КИРА**. Михаил, һин аҡылдан яҙҙың, туҡта!
**МИХАИЛ**. *(Упрямо.)* Ҡабатла!:

Беҙҙе гүргә генә яҡынайтҡан....

**КИРА.** Андрей Николаевич, туҡтатығыҙ, һеҙ бит күрәһегеҙ ул шашҡан!
**КОЛЬЦОВ**. Һеҙ ҡыҫылмаҫҡа һүҙ бирҙегеҙ.
**МИХАИЛ**. *(Резко.)* Ҡыҫылма, Кира! *(Алисе.)* Һуңғы тапҡыр әйтәм : ҡабатла!
Беҙҙе гүргә генә яҡынайтҡан....

**КИРА**. Андрей Николаевич!
**КОЛЬЦОВ**. Китегеҙ бынан!

*Кира бросается к Михаилу, который уже поднес очередной раз руку к кнопке, и пытается оттащить его от пульта. Михаил грубо отшвыривает ее прочь. Кира падает на пол. Кольцов бросается было, чтобы помочь девушке подняться, но останавливается. Кира в ужасе глядит на мужчин.*

Кем һеҙ? Хайыуандармы?
**МИХАИЛ**. *(Алисе.)*
Беҙҙе гүргә генә яҡынайтҡан....

**КИРА**. Андрей Николаевич, мин һеҙҙе хөрмәт иттем!! Мин һеҙҙе әүлиә итеп күрҙем! Мин һеҙ идеал тип уйланым, нимә булды?
Ул бит һеҙҙең һөйгәнегеҙ! Шул да һеҙҙе туктатмаймы? Фән һеҙҙең өсөн шул тиклем дә ҡәҙрлеме? Үҙегеҙ шул креслоға ултырығыҙ
**МИХАИЛ**. *(Алисе.)*
Беҙҙе гүргә генә яҡынайтҡан....

*Алиса стонет. Михаил подносит руку к кнопке. Кира снова бросается к нему, но Кольцов преграждает ей путь.*

**КИРА**. Ебәрегеҙ!ебәргеҙ!
**МИХАИЛ**. *(Он покраснел, глаза налились кровью, голос охрип.)* “Беҙҙе гүргә...” Өндәшмәйһеңме? Тот, улайһа!

*Нажимает раз за разом кнопку. На экране компьютера вспыхивает и угасает одна и та же цифра - “300”. Алиса громко кричит, стонет, извивается, бьется в ремнях.*

Тот! Тот! ТОт!.
**КИРА**. *(С новой силой пытаясь вырваться из рук Кольцова.)* Ярҙам итегеҙ! Ул уны үлтерәсәк! Ярҙам!!!!

*Алиса перестает кричать и, обмякнув, повисает на ремнях кресла. Михаил, нажав по инерции кнопку еще несколько раз, останавливается и растерянно смотрит на Алису. Неожиданно наступившая тишина кажется особенно пугающей.*

**МИХАИЛ**. Эй , нимә булды?

*Алиса не отвечает.*

Алиса!

*Молчание. Михаил мутным взглядом обводит комнату, пытаясь сообразить, где он и что происходит. Кольцов отпускает Киру. Тишина. Михаил с тревогой смотрит на своего руководителя.*

Андрей Николаевич, нимә булды?
**КОЛЬЦОВ**. Белмәйем..

*Подходит к Алисе, пытается прощупать ей пульс, отпускает руку; она бессильно повисает.*

**МИХАИЛ**. Пульс бармы?

*Кольцов качает головой.*

**КИРА**. *(В ужасе.)* Михаил, һин уны үлтерҙең?
**МИХАИЛ**. мин теләмәнем!
**КИРА**. Теләнеңме юҡмы, хәҙер мөһим түгел! Кеше үлтереүсе! *(Бросается к креслу и пытается привести Алису в чувство.)*
**МИХАИЛ**. Кира, мин ғәйепле түгел... МИн һеҙҙе тыңланым!
**КОЛЬЦОВ**. МИн бер нәмә лә эшләмәнем!
**МИХАИЛ.** Нисек инде эшләмәнем! Барыһын да һеҙ уйлап таптығыҙ!
**КОЛЬЦОВ**. МИңә ғәйепте һылтамағыҙ!
**МИХАИЛ**. ә һеҙ миңә һылтамағыҙ! Һеҙ ғәйепле!

**КИРА**. *(Смачивая Алисе мокрым полотенцем лицо и виски.)* Етте! Һеҙ икәүләп кеше үлтерҙегеҙ!!МИн дә! Йә, ниңә туктап ҡалдығыҙ? Табипты саҡырығыҙ! Ҡайҙа телефон? ТИҙ булығыҙ!

*Михаил в оцепенении смотрит на свою жертву. Кольцов тоже не двигается с места. Кира сама бросается к выходу, но ее останавливает спокойный голос Алисы.*

**АЛИСА**. Кира, туктағыҙ!

*Кира поворачивается и, к своему удивлению, видит Алису - подтянутую, бодрую, без всяких видимых следов обморока и телесных страданий. Михаил тоже изумлен происшедшей переменой.*

**КИРА**. Һеҙ? үлмәнегеҙ?
**АЛИСА**. Тынысланығыҙ, ҡәҙерлем, миңә ҡыйын түгел.. *(Кольцову.)* Ғәфү ит, Андрей, уйындан сығырға кәрәк, дауам итеү бик аяуһыҙ!. Был опыт- һуңғы..
**КИРА**. Бәлки табип кәрәктер?
**АЛИСА**. Кира, һөйөклөм, кәрәге юҡ!. Һеҙ бит күреп тораһығыҙ, мин сәләмәт!.. Эксперимент тамам..
**МИХАИЛ**. Ә электрошок?

**АЛИСА**. бер ниндәй ҙә  электричество булманы!
**МИХАИЛ.** Буш хәбәр! Һеҙ ҡысҡырҙығыҙ, иланығыҙ!... Ағарҙығыҙ...
**Алиса**. Ышанмаһаң, баҫып ҡара.

*Михаил, недоверчиво взглянув на Алису, медленно протягивает палец к кнопке.*

Ҡурҡма!
**МИХАИЛ**. Юҡ инде, етте!  *(Отдергивает руку.)*

*Кира подходит к пульту и решительно нажимает кнопку. На экране компьютера появляется цифра “300”.*

**АЛИСА**. *(Улыбаясь.)* Хәҙер ышанаһығыҙмы?
**МИХАИЛ**. *(С облегчением.)* ТИмәк, был уйын?

*Михаил отвязывает Алису. Кира круто поворачивается к Кольцову.*

**КИРА**. Нисек быны аңларға?
**АЛИСА**. *(Вставая с кресла.)* Кира, һылыуым, ҡарама улай Андрейға... Ул ғәйепһеҙ..
**КИРА**. *(Переводя на Алису неприязненный взгляд.)* Ғәфү итегеҙ, ә һеҙ кем әле шул тиклем? **АЛИСА**.  *(Улыбаясь чуть насмешливо.)*  Кем мин?

Простая девушка, без всяких знаний,
Тем счастлива, что уж не так стара,
Чтоб не учиться, а еще счастливей, -
Что не глупа и сможет научиться...

Шекспир, “Венецианский купец”, акт третий, сцена вторая.

**КИРА**. Хәҙер хәтерләнем! Һеҙ актриса!
**МИХАИЛ**. Актриса?!
**КОЛЬЦОВ**. Алиса - минең дуҫым!.
**КИРА**. Мин ҡотлайым һеҙҙе!.Һеҙ бик яҡшы уйнанығыҙ!
**АЛИСА**. Кира, зинһар өсөн, кисерегеҙ беҙҙе..
**КИРА**.  МИңә һеҙҙең һүҙҙәрегеҙ кәрәкмәй! Мин китәм, тик китер алдынан шуны әйткем килә! Мин һеҙҙе күрә алмайым! Һеҙҙең тауышығыҙҙы, һәр бер хәрәкәтегеҙҙе! Һеҙ ҡылансыҡ! Һеҙҙең иманығыҙ, оятығыҙ юҡ! Ҡыуанығыҙ!

*И, вместо того чтобы уйти, Кира опускается на стул и начинает плакать.*

**МИХАИЛ**. Ярай инде,етәр һиңә, киттек.
**КИРА**. Кит бынан, мин һине күрә алмайым!
**МИХАИЛ**. Тыныслан.
**КОЛЬЦОВ**. *(Алисе.)* Нимә эшләргә?
**АЛИСА**. Аңлат! *Кольцов с Михаилом выходят*! Кира, һөйөклөм...
**КИРА**.  *(Сквозь слезы.)* Мин теләһе нимә һөйләп ташланым... Ғәфү итегеҙ.
**АЛИСА**. Буш.. Һыу эс, ә мин һиңә бер сер асам.
**КИРА**. Ниндәй сер?
**АЛИСА**. Эс.

*Кира пьет воду.*

Хәҙер тыңла. Һин мине Кольцовтың һөйгәне тип әйттең, тик мин уның һөйгәне түгел, һәм бер ҡасан да булмаясаҡмын да.Беҙ уның менән дуҫтар ғына.
**КИРА**. *(Смущенно.)* Нимәгә һеҙ миңә быны һөйләйһегеҙ?
**АЛИСА**. Йә-йә, Кира... Мин был психологияны һеҙҙең профессораҙан яҡшыраҡ аңлайым! *(Громко.)*

*входят кольцов с михаилом.*

**МИХАИЛ.** Хәҙр мин аңланым.. Һеҙҙең эксперимент - аяуһыҙлыҡты ғилми тикшереү.
**КОЛЬЦОВ**. Улай түгел. Һорау – ниндәй кешеләр шул енәйәттәрҙе ҡыла икән? Кемдәр самолеттарҙы , балалар менән автобустарҙы шартлата, ҡатын-ҡыҙҙарҙы үлтерә?
**МИХАИЛ**. Садистар, маньяктар, кеше үлтереүселәр..
**КОЛЬЦОВ**. Күбеһендә - ябай, тыңлаусан, әҙәпле, шым кешеләр.. Улар ҡатындарын, балаларын яраталар, кескәйҙәрҙе, хайыуандарҙы йәлләйҙәр, Аллаға ышаналар һәм Моцартты тыңлайҙар.
Опыт нигеҙедә - ошо һорауға яуап табыу. Етәксе һүҙенә ҡайһы сиккә тиклем кеше ышанырға әҙер икән?
**МИХАИЛ**. Бына нисек. . Мин үҙемде бик насар яҡтан күрһәттем.
**КОЛЬЦОВ**. Ысын әйткәндә шулай. Тик һеҙҙең урынығыҙҙа күбеһе шулай эшләр ине.
**КИРА.** Нисек?!
**КОЛЬЦОВ**. Беҙ Алиса менән йөҙлгән опыт үткәрҙек, һәм өстән икеһе кешене язаларға әҙер икән. Рәсәйҙә генә түгел, хатта сит илдә лә шундай хәл.
**КИРА**.. Булмаҫ!
**АЛИСА.** Була, Кира, Була! Нидәй аяуһыҙ, ҡанһыҙ кешеләр була икән , хәтерләүе лә ҡурҡыныс.

*Михаил опускает голову.*

*Пауза.*

**МИХАИЛ.** Ни өсөн был опытҡа һеҙ Кира менән мине саҡырҙығыҙ?
**КОЛЬЦОВ**. Наташа менән һеҙҙе. Тулы яҡшы ғаиләнән, һау кешеләрҙе эҙләнем.
**КИРА**. Ә миңә был талаптар ҡағылмаймы ни?
**КОЛЬЦОВ**. *(Протестуя.)* Кира...

**МИХАИЛ.** Нимә күрһәтә инде һеҙҙең эксперимент? Бөтә кешеләр ҙә ҡанһыҙ икәнен?
**КОЛЬЦОВ**. Юҡ.Ҡанһыҙлыҡта эш түгел, түҙемлектә. Башлыҡтарҙы, хөкүмәтте тыңлауҙа. Беҙҙе бала саҡтан түҙергә һәм тыңларға өйрәтәләр. Роддомда, балалар баҡсаһында, мәктәптә, әрмелә, эштә, - тәртиптең мөһимлеге тураһында ҡысҡыралар.
**МИХАИЛ**. Һеҙ тәртипкә ҡаршы?
**КОЛЬЦОВ**. Әлбиттә, юҡ.. Унһыҙ йәмғиәт була алмай. Тик ниңә беҙҙең ҡылыҡтарыбыҙ кешлекле булырға тейешлеген әйтергә онотолар? Һәр бер эшләгән эшкә беҙ үҙебеҙ яуаплы!!!
**МИХАИЛ.** Тимәк мин әрмегә китһәм, мин кеше үлтерә алыр инемме? Ышанмайым. Был аяуһыҙ дәресте мин онотмаясаҡмын. Һуғышҡа ебәрһәләр, исмаһам нимәнән ҡурҡырға белермен.
**КИРА**. Бик яҡшы дәрес.
**МИХАИЛ.** Миңә һинең тауышың оҡшамай, үҙең һуң ниндәй сиккә еттең?.

*Кира не отвечает.*

Йә, нимә тынып ҡалдың?
**КОЛЬЦОВ**. МИнең уйлауымса, Кира һеҙҙе ҡайғыртырға теләмәй, ул һикһән вольтта туҡтап ҡалды.
**МИХАИЛ.** Мин ҡанһыҙ түгел, Мин әсәйемде яратам, балалрҙы, сәскәләрҙе, Кира, әйт. Мин бесәйҙе лә язалағаным булманы..

*Кира молчит.*

**КОЛЬЦОВ**. Тынысланығыҙ , Михаил. Һеҙҙең кешелеклегегеҙҙә бер кем дә шикләнмәй..
**АЛИСА.** Бигерәк тә мин.
**МИХАИЛ.** Эйе, һеҙ мине тоттоғоҙ. Тик мин ысынлап та кешелекле! Мин яҡшы, ишетәһегеҙме?

*Все молчат. Михаил в смятении.*

Кира, киттек бынан.

*Кира не реагирует. Михаил повторяет с мольбой.*

Кира!

*Молчание. Резко повернувшись, Михаил выходит.*

**КОЛЬЦОВ**. *(Обращаясь к Кире.)* Барығыҙ!
**КИРА**. Юҡ.

*Пауза.*

**АЛИСА**. *(С чуть заметной теплой усмешкой.)* Ярай, мин мәшәҡәтләмәйем..
**КОЛЬЦОВ**. Китәһеңме?
**КИРА**. Арынығыҙмы?
**АЛИСА**. Һеҙ ышанырһығыҙмы икән, ҡорбанды уйнауы бик ҡыйын. Андрей, китабың сыҡҡас миңә бүләк итергә онотма.. *(Протягивая руку Кире.)* Бәхет теләйем.
**КИРА**. Ғәфү итегеҙ мине.
**АЛИСА**. Кира, ҡәҙерлем, мин һеҙҙең дәресегеҙҙән һуң һеҙҙең бар буласаҡ гонаһтарығыҙҙы кисерҙем.
**КИРА.** Әйтегеҙ... Ни өсөн минең экспериментта ҡатнашыуыма ҡаршы торҙоғоҙ?
**КОЛЬЦОВ.** Был опыттарҙа мин насар кеше роледна, һеҙҙең алдығыҙҙа улай күренергә теләмәнем. .
**КИРА**. Һеҙгә ысынлап та был мөһимме?
**КОЛЬЦОВ**. Эйе
**КИРА**. Нимәгә?
**КОЛЬЦОВ**. Һеҙ минән йәш, матур, һөйкөмлө.. һәм мин һеҙҙе… мин һине....

*В комнату врывается Михаил. Он очень возбужден. Увидев Киру и Кольцова, поглощенных друг другом, он останавливается в полной растерянности.*

Нимә булды Михаил?
**МИХАИЛ.** Кира... *(Дрогнувшим голосом.)* Кира....
Унда журналистар мине уратып алдылар һәм ебәрмәйҙәр, һорауҙар бирәләр.
**КИРА**. Ә һин?

**МИХАИЛ**. Ә мин нимә әйтә алам? Мин насар кеше, ҡанһыҙ, аәуһыҙ кеше үлтереүсе тип әйтәйемме?
**КОЛЬЦОВ**. Тынысланығыҙ , Михаил.
**МИХАИЛ.** Эйе, мин садист, тик был хәлгә кем мине еткерҙе? Һеҙ! Эксперимент өсөн йәнемде һурып алырға әҙерһегеҙ бит! Кира алдында мине насар яҡтан күрһәтергә теләнегеҙме ни? Мин һеҙҙе күрә алмайым! *(Хватает стул и замахивается на Кольцова.)*
**КИРА**. Һин аҡылдан яҙҙыңмы? Туҡта!! *(Пытается удержать его.)*

*Михаил, обмякнув, опускает стул. По его лицу текут слезы. Кира гладит его по голове.*

**МИХАИЛ**. Кира, нисек хәҙер йәшәргә?
**Кира.** Уйлама!...
**МИХАИЛ**. Нисек уйламаҫҡа, иртәнсәк кенә минең тормошом икенсе ине. Барыһы ла селпәрәмә килде, нисек хыҙер йәшәргә???